■ Ислам әҙәбе

# ИЗГЕ УЙҘАР ҒЫНА УЙЛАЙЫҠ!

Беҙҙең уйҙарыбыҙ әлеге ваҡытта беҙҙең тормошта нимәгә эйә булыуыбыҙҙы билдәләй. Әгәр эсебеҙҙә тыныслыҡ һәм мөхәббәт икән, тыштан да шул уҡ уратып алаҫаҡ. Тышҡы яҡ эске яҡҡа тиңләшә. Уйҙар күп нәмәне аңлата. Беҙҙе уратып алған бөтә нәмә ниндәйҙер кимәлдә беҙҙең йә яҡшы, йә насар уйҙарыбыҙҙың емеше. Уйҙарыбыҙға баһа биреп, беҙ үҙебеҙ менән ни өсөн тегә йәки был хәлдәр булыуын аңлай, әлеге ваҡытта эсебеҙҙә нимә икәнлеген әйтә алабыҙ.

Беҙ үҙебеҙгә һәм башҡаларға ҡарата насар уйҙарҙан һаҡланырға тейешбеҙ. Юғиһә, һәр насар уй, насар ынтылыштар, насарлыҡ тураһында ниәтләнгән фекерләүҙәр иртәме, һуңмы беҙҙең өсөн насар йәки кәрәкмәгән ғәмәлгә ҡотко һаласаҡ. Беренсе сиратта беҙгә аңыбыҙҙың төбөндә ниндәй уйҙар йөрөтәнебеҙҙе асыҡлау мөһим, ысынында беҙ үҙебеҙгә нисек ҡарайбыҙ: һәйәү һәләте, физаҡәрлек итә белеү, шатланырға һәм алдыбыҙҙа торған проблемаларҙы яуаплы сисергә һәләтле Аллаһы Тәғәләнең яралтҡан яҡшы заты итеп күрепме, әллә ситкә тибелгән, ят, бер ниндәй ҙә ҡиммәттәргә эйә булмаған зат типме.

Беҙҙең уйҙарыбыҙ хатта йөҙөбөҙҙә лә сағыла. Изге уйлы кешеләр ғәҙәттә нурлы булып күренә, эске матурлыҡтары уларҙы нурландыра, хатта, дөрөҫ йөҙ төҙөләшлә булмағандар ҙа һөйкөмлө һәм матур булып күренә. Насар уйҙар иһә йөҙ физиологияһы буйынса иң камилына ла йәмһеҙлек күләгәһе һала.

Кемдендер насар уйҙары беҙгә кире тәьсир итеүе бар. Әгәр ҙә кешегә һәр ваҡыт һин насарһын тип әйтеп торһаң, һөҙөмтәлә ул үҙен нисек итеп күрергә теләүҙәрен аңлай алмаясаҡ. Кешенең бит көтөүҙәрҙе аҡлау сифаты бар. Кешегә һин шундай буласаҡһың, тип әйтеү - уның һайлауына йоғонто яһауы мөмкин. Насар уйлы кеше һәр ваҡыт был хәлде үҙендә тотоу юлдарын хәстәрләй, шуға күрә хатта уға үҙенең тормош хәлен үҙгәртергә тура килһә лә, ул уны яңы "ят", "дошман", "ғәйеплеләр" менән "йыһазландырырға" ынтыласаҡ. Сөнки ул йылдар буйы насар уйҙар менән йәшәп, үҙен был хәлдә яҡшы тоя башлай. Ғәҙәткә әйләнгән насар уйҙарының булмауы унда дискомфорт барлыҡҡа килтерә. Был хәлдән ҡотолор өсөн ҙур көс һәм эш талап ителә.

Был йәһәттән кеше үҙенең эске торошона ҙур иғтибар бүлергә тейеш. Донъяны үҙенсә үҙләштереүҙә йомолоуы уны, ысынбарлыҡтан айырылыуына килтерә. Бәлки, ысынбарлыҡ ысынында бик үк насар түгелдер һәм кешеләр ҙә уға артыҡ дошман түгелдер... Әммә быға ышанмаған кеше ысынбарлыҡ донъяны үҙенең эсенән күрһәтә башлай, һәм был ике донъя конфликтка инә. Өҫтәүенән кеше үҙен һәм, үҙе йәшәгән донъяны алдауға сума. Был осраҡта уның тормошон уйҙырма тип атарға була. Ул саҡта кешегә бигерәк тә ауырға тура килә: уйҙырма тормош үҙенә тарта, сөнки эске тормошто төҙөгәндә артыҡ көс түгергә тура килмәй.

Тик хаҡ ғилем, аңы теүәл, йөрәге таҙа булған аҡыллы кешеләр менән бергә булыу кешегә боҙоҡ әйләнәнән сығырға ярҙам итә. Бөтәһенә лә кешенең ҡурҡыуҙары: үҙен кәрәкһеҙ, ситләтелгән, береһе лә яратмай тигән тойғолары ғәйепле. Мөхәммәт пәйғәмбәр (с.ғ.с.) үҙенең уҡыусыларын һәр ваҡыт: "Насар уйҙарҙан ҡотолоғоҙ", - тип иҫкәрткән.

Исламда иманлылар үҙенең кәрҙәше тураһында насар уйларға тейеш түгеллеге тураһында асыҡ һәм ҡатғы әйтелгән. Ислам башҡалар тураһында яҡшы уйларға саҡыра. Йыш ҡына, кем тураһындалыр насар уйлаған кеше йә тулы белемгә эйә булмай, йә тик самалап эшләй, йә үҙенең шиксел ҡараштары тәьсирендә йөрөй. Шуның өҫтәүенә, һәр кеше үҙе тураһында кешеләрҙең ихлас күңелдән яҡшы һөйләүҙәре өсөн тырышырға тейеш. Йәғни кешеләрҙең йөрәгендә һәм һүҙәрендә һәр береһенә ҡарата изге уйҙар ғына булырға тейеш. Пәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) ваҡытында булған бер хәлде ҡарап үтәйек. Бер ваҡыт Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) уҡыусылары менән бергә булған саҡта, улар эргәһендә кемделер ерләгәндәр. Сәхәбәләрҙең береһе үлгән кеше хаҡында изге һүҙҙәр әйткән. Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) шул ваҡыт: "Раҫланды", - тигән. Бер аҙ ваҡыттан улар эргәһенән тағы ла бер мәрхүмде алып киткәндәр. Был кеше тураһында уның яҡшы кеше түгеллеген әйткәндәр. Пәйғәмбәр тағы ла: "Раҫланды", - тигән. Фүмәр (р.а) түҙмәй: "Нимә раҫланды, эй Аллаһтың пәйғәмбәре?" - тип һораған. Бәйғәмбәр (с.ғ.с.): "Беренсе кешегә һеҙ ыңғай баһа бирҙегеҙ һәм шулай итеп уның ожмахҡа инеүе раҫланды. Ә икенсе кешегә насар баһа бирҙегеҙ, шуның менән уның тамуҡҡа инеүе раҫланды. Мосолмандар Аллаһтың ерҙәге шаһиттары бит", - тип яуап биргән.

Шулай итеп, үҙебеҙҙе һуңғы юлға оҙатыусылар беҙҙең турала ихлас күңелдән: "Ул шундай яҡшы кеше, Аллаһтың күңдәм ҡоло ине", - тип әйтерлек булһын.

Ислам, теге йәки был әҙәп нигеҙҙәрен тәҡдим итеп, уның нескәлектәренә лә иғтибар бүлә. Үҙебеҙ белмәгән кеше тураһында уйлау хата ғәмәл булып иҫәпләнә. Шулай ҙа, әгәр ниндәйҙер кеше ышанысты аҡламай һәм намыҫһыҙ икән, был турала башҡаларҙы иҫкәртеү мосолмандың вазифаһы икәне билдәле. Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) ниндәйҙер ҡәбиләнән бер кешенең үҙҙәренә килергә теләүен ишеткәс, үҙенең әйләнә-тирәһен был шул ҡәбиләнең насар кешеһе, тип иҫкәрткәндән һуң ғына уны ҡабул иткән.

Тағы ла бер риүәйәт был теманы аныҡларға ярҙам итә. Был хәл мосолмандарҙың еңеү менән Мәккәгә ҡайтыуҙарынан һуң булған. Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) ярҙамға мохтаж булған, ас Мәккә кешеләренә ярҙам ебәрергә булған. Сәхәбәләрҙән Әмир ибн Фаува әл-Ансари (радиаллаху анх) был эш өсөн һайланған һәм ул үҙенә ярҙамсы табырға тейеш булған. Бер кеше, был турала белеп, ярҙамын тәҡдим иткән. Әмир (р.а.) үҙенең юлдашы тураһында Пәйғәмбәргә (с.ғ.с.) әйткән. Ләкин Пәйғәмбәрҙә (с.ғ.с.) был кешегә ҡарата шик булған. Ул Әмирҙе иҫкәрткән һәм был кеше менән һаҡ булыуын үтенгән.

Юлдаштар бер ауылға яҡынлашҡас, Әмиргә ярҙамсыһы былай тип мөрәжәғәт иткән: "Был минең ауылым, унда минең эшем бар ине, әммә мин тиҙ әйләнермен. Мине ошонда көтөп тор".

Ул киткәс, Әмир Пәйғәмбәребеҙҙең (с.ғ.с.) нәсихәтен иҫенә төшөргән һәм үҙенең әйберҙәрен йыйған да дөйәһен йәһәтерәк ҡыуып был урындан йырағыраҡ киткән. Бер аҙҙан ул юлдашының ун кеше алып килгәнен күргән. Улар араһында ҙур ғына арауыҡ булған һәм Әмир (р.а.) дөйәһен тиҙерәк ҡыуып уларҙан ҡаса алған.

Пәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) әхлаҡҡа өйрәтеүсе бөйөк уҡытыусы, кеше ниндәй булыуын һиҙгән һәм күргән, ниәттәрен, уйҙарын белгән, әммә кәрәк булмаһа был турала бер кемгә лә өндәшмәгән. Был риүәйәттән күренеүенсә, Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) үҙенең уҡыусыһын бәләнән һаҡлап ҡалған.

Ышаныс һәм хәүефһеҙлек тойғоһо уятмаған кеше тураһында һаҡланыу йәһәтенән үҙендең фекеренде әйтергә мөмкин, әммә кешенең хаҡ ниәтен белмәйенсә, уның тураһында насар һөйләү - Аллаһы Тәғәләнең асыуын килтергән ғәмәл. Бер ваҡыт Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) саҙаҡа биреүсегә уның ыңғай тәьсире һәм саҙаҡаның мәғәнәһе тураһында әйткән. Пәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) ярлы уҡыусыларының береһе Әбү Акил Әл-Ансари (р.а.) бер аҙ финик эшләү ниәтендә төнө буйы һыу ташыған. Уның бер өлөшөн иртәнсәк ғаиләһенә ҡалдырған, ә икенсе өлөшөн мохтаждарға бирһен өсөн пәйғәмбәргә (с.ғ.с.) биргән. Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) үҙенең уҡыусыһының был аҙымына бик ҡыуанған һәм уның өсөн күп доға әйткән. Әммә яуыз телле монафиҡтар, Аллаһ Тәғәлә Акилдың финиктарына мохтаж түгел, тип унан көлгән, уны кәмһетә һәм уның ярҙамына түбәнселек менән ҡарай башлаған. Хатта, был эште Акил Пәйғәмбәрҙән (с.ғ.с.) маҡтау һүҙҙәре ишетер өсөн, йәғни күҙ буяу өсөн генә эшләгән, тип әйтеүгә тиклем еткәндәр. Ошо хәлдән һуң Аллаһы Тәғәлә монафиҡтарҙың хәленә төбәлгән Ҡөрьән аяттары төшөргән: "Үҙ теләге менән саҙаҡа биргән мосолман кешеһенән һәм үҙ тырышлыҡтары менән тапҡан малынан әҙ генә саҙаҡа биргәндәрҙән (монафиҡтар) мыҫҡыл итеп көләләр.

Аллаһ уларҙың үҙҙәрен мәсхәрә итәсәк. Һәм уларҙы әрнеткес ғазапҡа һаласаҡ" (Әт-Тәүбә сүрәһе, 79). Шулай итеп, берәйһе яҡшы, изге кеше тураһында насар уйлаһа, йә һөйләһә ошо ғәмәле менән Аллаһы Тәғәләнең асыуын да алыуы мөмкин.

Мосолман үҙе тураһында насар уйлауҙы сикләргә хоҡуҡлы, ул кешеләрҙе насар уйға әтәргә юл ҡуймаҫҡа тейеш. Бер ваҡыт төндә Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) урамдан үҙенең ҡатыны Сафия менән үтеп барған, ә уларҙан алда бер нисә мосолман китеп барған. Мосолмандар насар уйламаһындар, Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) эргәһендә кем китеп бара икән, тигән фекерҙәргә сыуалмаһындар өсөн, ул уларға үҙен көтөп торорға ҡушҡан. Уларҙы ҡыуып етеп, эргәһендә китеп барыусының үҙенең ҡатыны Сафия булыуын әйткән.

Был осраҡта ул кешеләр Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) тураһында насар уйламаһалар ҙа, Пәйғәмбәр (с.ғ.с.) уларҙы иҫкәртеп ҡуйыуҙы кәрәк, тип тапҡан. Һәм уларға шайтан кеше тәнендә ҡан буйлап йөрөүе мөмкин тураһында һәм йөрәктә бер ниндәй насар уй ҙа тоҡанмаһын өсөн хәлде ваҡытында аңлатып ҡуйыу һәр ваҡыт яҡшы икәнлеген әйткән. Изге уйҙар - күңелдең юғары хәле.

Изге һәм таҙа уйҙар донъяны матурыраҡ һәм йылыраҡ итә. Насар уйҙар иһә ауырыуға килтерә. Аллаһы Тәғәлә беҙҙе насар уйҙарҙан һәм һүҙҙәрҙән һаҡлаһын! Амин!

# Ғаиләнең терәге нимәлә?

Ғаиләнең ниндәй булырға тейешлеге тураһында уйлағанда, иң элек уны тәшкил итеүсе ҡатын менән ирҙең бер фекерҙә булыуы, тормошто күҙаллауында уртаҡ принциптарға таяныуы кеүек төшөн-сәләр аҡылға килә. Әлбиттә, ул идеаль ғаиләләргә ҡарай. Ғәҙәттә, ир менән ҡатындың холоҡтары, темпераменттары, зыялыҡ һәм уҡымышлылыҡ дәрәжәләре, ниһайәт, зауыҡтары төрлө була. Шул сәбәпле улар йыш ҡына уртаҡ тел таба алмай. Бындай осраҡта инде ир йәки ҡатындың бары бер-береһенең һүҙен тыңлауы, бер-береһен аңлап тороуҙары ғына ғаиләнең бәхетле киләсәген тәьмин итә ала.

Бер-береңде аңлап йәшәү беренсе нәүбәттә сабырлыҡҡа таяна. Ғаилә тормошонда сабырлыҡ үтә ҙур әһәмиәткә эйә. Сабыр булмағанда ғаиләнең тотороҡлоғона ирешеү мөмкин булмаҫтай эш тиһәк тә яңылышмаҫбыҙ.

Пәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) ғаилә тормошонда сабырлыҡ-тың ни дәрәжәлә мөһим булыуын, әлбиттә, бик яҡшы белгән һәм был хаҡта бик ғибрәтле һүҙҙәр ҙә әйтеп ҡалдырған.

Уларҙың мәғәнәһе шул: сабырлыҡ бөтөн ерҙә лә кәрәк, әммә ғаилә тормошонда айырыуса зарури. Ғаилә тормошонда сабырлыҡ күрһәткән кешене йәннәт көтә, улай ғына ла түгел, ул унда түрҙәге урындарҙың береһендә булыр, тигән Пәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.)

Ҡатынына ҡарата сабырлыҡ күрһәткән ир кешегә Әйүп пәйғәмбәр (ғ.с.) сабырлығы дәрәжәһендә сауап яҙылыр. Иренә ҡарата сабыр иткән ҡатын-ҡыҙға иһә Мысыр фиргәүене ҡатыны Асия сабырлығы дәрәжәһендә сауап яҙылыр.

Сабырлыҡтың әжер-сауабы был дәрәжәлә ҙур булыуын белгән һәм аңлаған кешеләр, ғаиләлә татыу торорға тырышасаҡ. Һәм сабыр итеүҙең әжерен әхирәттән алда был донъяла алырҙар, сөнки һәр ирҙең һәм ҡатындың бер-береһенең ризаһыҙлығын тыу-ҙырған ғәмәлдәре лә был осраҡта һиҙелерлек кәмейәсәк, йәнә әүәлгәсә былбылдар кеүек һайрашып йәшәргә мөм-кинлек тыуасаҡ.

Имам Ғаззалиның тағы шундай бик ғибрәтле һүҙҙәре лә бар: ҡатын менән тынышып йәшәү өсөн бары тик уның хәтерен һаҡлау, рәнйетмәү генә етмәй. Ир ҡатынынан уны рәнйетеүсе, хәтерен ҡалдырыусы һүҙҙәр ишеткәндә лә хәләл ефетен аңларға тырышырға, сабырлығын юймаҫҡа тейеш. Ҡатын өсөн дә шул уҡ ҡағиҙә бар. Йәғни, ул да иренең холоҡһоҙлоғона ҡарата түҙемле булып, ғаилә бәхетен һаҡлап ҡалырға тейеш була.